*Тирә- яҡ мөхитте һаҡлау йылына арналған конкурсҡа*
*«Матур ерҙәр күп булһа ла, Ейәнсура бер генә»*
*(«Заповедные места Зианчуринской земли»)*



# Муйнаҡ ауыл китапханаһы тәҡдим итә

# «Һыусыҡҡан» шишмәһе

Авторы Әбделғужина Финиза Ғайса ҡыҙы, китапханасы



“Һыусыҡҡан”- Ейәнсура районы Түбәнге Муйнаҡ ауылынан көньяҡтараҡ, тау- таш араһынан урғылып аҡҡан шишмә шулай тип атала. Үтә лә саф, теш ҡамашырлыҡ һалҡын был һыуҙы алып ҡайтһаң, бер ваҡытта ла боҙолмай. Ҡыштың сатлама һыуыҡтарында ла туңмай был шишмә.Уның һыуы  һаулыҡ, сәләмәтлек өсөн файҙалы икәнен элек- электән урындағы башҡорттар ҙа, күрше Ырымбур өлкәһе урыҫтары ла белгән. Хатта Андреевка сиркәүе руханиҙары   был һыуҙы “Тере һыу” тип, үҙ урыҫтарына һатҡан, тиҙәр.

**Сылтырап аға һыусыҡҡан шишмәһе.**

**Саф, тап- таҙа һыуында бер бер миҡдар ҙа бысраҡ юҡ,таҙартылған һыу кеүек. Был шишмә янында теләгән теләктәр тормошҡа аша. Һыусыҡҡан шишмәһе саф булғас, уға ни теләһәң- ул да һиңә шуны теләр, алыр булһаң тик изге теләктәр менән генә алырға кәрәк. Шул осраҡта һыу үҙенең шифаһын арттырыр, һеҙҙең теләктәрегеҙҙе донъяға таратыр.**



Һыусыҡҡан шишмәһе- Башҡортостандың  алтын күҙгеһе.Әүлиә шишмәһенән һыу алырға тип төрлө ерҙән, хатта сит өлкәләрҙән дә киләләр.Күп ауырыуҙарҙан дауа тип эсәләр уны. Һыусыҡҡан шишмәһенең һыуын ғалимдар тикшергәндән һуң, уның составында кешегә файҙалы элементтар күп, тигән һығымтаға килә.

Уникаль мөғжизәле шишмә йыл буйына тынмай  аға. Тау итәгенән юл алған шишмәгә һауа торошо, яуым- төшөм йоғонто яһамай. Һыуы йылдар буйына иҫкермәй һаҡлана.



Тәнгә, йәнгә  сихәт, шифа биреүсе һыусыҡҡан шишмәһе янынан кеше өҙөлмәй. Изге шишмәгә тирә яҡ ауылдарҙан, күрше өлкәләрҙән һыу алырға киләләр. Төрлө байрамдарҙы, тыуған көндәрҙе  Муйнаҡ ауылы халҡы ошо шишмә янында үткәрергә ярата. Алыҫтан  килгән ҡунаҡтар, ситтән ҡайтҡан яҡташтарыбыҙ ҡайтҡан һайын ошо изг сығанаҡтан һыу эсеп, күстәнәскә һауыт- һауы һыу алып,”тағы ла





«Һыусыҡҡан»- халыҡтың яратҡан ял итеү урыны. Ауыл хакимиәте тарафынан шишмәгә ҙур иғтибар бүленә. Тирә- яғын һәр ваҡыт тәртиптә тотоу өсөн өмәләр ойоштороп, сүп- сарҙан таҙартып торабыҙ.Муйнаҡ урта мәктәбе уҡыусылары шишмә тирәләй ағастар ултыртып сыҡты.

Башҡортостан хөкүмәте ярҙамы менән шишмә заманса итеп кәртәләп алынды, ярҙарына бетон плитәләр түшәлеп, декоратив баҫҡыстар эшләнде. Эргәһенә ял итеү өсөн беседкалар төҙөлгән.Хәйерҙе һыуға һалмаһындар өсөн мәсет

**Шишмәнән йөҙләп метр өҫтәрәк,Балҡантау итәгендә ҡәбер урыны бар. Түбәнге Муйнаҡ ауылы халҡы, карттарҙың әйтеүе буйынса, был урынды кәртәләп алған, ҡәбер ташы ултыртҡандар.Унда әүлиә ерләнгән тиҙәр.**

**Борон- борондан халыҡ шунда барып аят уҡыған, теләк теләгән. Шуға ла Һыусыҡҡанды Әүлиә шишмәһе тип тә атайҙар.**





2016 йылдың йәйендә район ағинәйҙәре лә был урынға йыйылып, һыусыҡҡан әүлиәһе рухына аят уҡып, матур урында ял итеп, тыуған яҡтың шифалы үләндәрен йыйып, БСТ каналының «Сәләм» тапшырыуына төшөп ҡайттылар.





Ҡайнап торғандай урғылып сыҡҡан шишмәне күргән һайын яҡташ шағирыбыҙ Мәхмүт Һибәттең ошо шишмәгә арнап яҙған шиғыр юлдары иҫкә төшә:

Эй, һыусыҡҡан шишмәһе,
Һин бит һыуҙар инәһе.
Өҫкәлек тә, Эйек тә
Миңә шулай тип әйтә.

Эй, һыусыҡҡан шишмәһе,
Һин тәңренең тиҫбеһе.
Мәңге мәлде һанаусы,
Хисте һиҙгер аңлаусы.



Эй,Һыусыҡҡан шишмәһе,
Һине кем һуң эсмәне?
Минең шикелле ятып
Ҡуҙлы тулҡының тартып.

Аҡ, Һыусыҡҡан шишмәһе,
Изге сүрәңде уҡып.
Һин- хистәрҙең Мәккәһе,
Мәл сихрилығын татыт.

Килермен әле һиңә
Ҡыш, Һыусыҡҡан
шишмәһе,
Үҙеңде илгә тиңә,
Хуш, Һыусыҡҡан
шишмәһе!




Ауырыуҙарға дауаһы,
шанлы һәм данлы
тарихыбыҙҙың тере хәтере,
рухи көс биреүсе илаһи бер
мөғжизәгә тиң сығанаҡ
«Һыусыҡҡан»- Ейәнсура
районының 7 мөғжизәһенең
береһе.
Шишмә «Ейәнсурам-
мөғжизәләр иле» китабына
ингән.
Уның эргәһендә нисектер
таҙарынып, яман уйҙарҙан
арынып, көс һәм рух алғандай
тойаһың үҙеңде.



2017 йыл-Экология һәм айырыуса һаҡланыусы тәбиғәт биләмәләре йылы. Шишмәләрҙең сылтырап ағыуы, йылға- күлдәрҙең сихри сафлығы күңелдәргә йән тыныслығы бирә. Улар йәшәү өсөн дәрт- дарман, көс-ҡеүәт өҫтәй, сафландыра, илһамландыра. Ләкин тәбиғәт яҡлауға, һаҡлауға мохтаж- шуны онотмайыҡ! Ата- бабаларҙан ҡалған изге аманат- һыусыҡҡан шулай быуаттан – быуатҡа урғылып аҡһын, киләсәк быуындарға ла үҙ шифаһын, көсөн юғалтмай алып барып еткерһен ине.